# «Башҡорттарҙың милли аш-һыуы»

## темаһына проект эше



**Проект темаһы:** “Башҡорттарҙың милли аш-һыуы”

**Проект тибы:** ижади

**Проект төрө:** ҡыҫҡа ваҡытлы (3 аҙна)

**Проектта катнашыусылар:** төрлө йәштәге “Ҡурай” төркөмө балалары, уларҙың ата-әсәләре.

**Тикшеренеүҙең актуаллеге.** Башҡорт аш-һыуы – башҡорттарҙың традицион аш-һыуы. Халыҡтың йәшәү рәүеше башҡорттарҙың үҙенсәлекле мәҙәниәтен, йолаларын һәм аш-һыуын формалаштырған: ауылдарҙа ҡышлау һәм йәйләүҙәрҙә күсмә тормош алып барыу рационды һәм аш-һыу әҙерләүҙе төрлөләндереү мөмкинлеге биргән.

Хәҙерге заманда беҙ милли аш-һыуҙы онотоп, магазин кәштәләрендәге ризыҡтарға өҫтөнлөк бирә башланыҡ, ҡайһы бер балалар милли ризыҡты бөтөнләй ашап ҡарағаны юҡ. Беҙ халҡыбыҙҙың йолаларын, аш-һыуын онотоп барабыҙ. Минеңсә, һәр бала милли ризыҡтарҙы ашап, уларҙың атамаларын һәм нисек әҙерләнеүен белеп үҫергә тейеш. Файҙалы ла, тәмле лә башҡорт ризыҡтары кешене дарыуҙарҙан да яҡшыраҡ дауалау көсөнә эйә.

**Тикшеренеү проблемаһы:** башҡорт милли аштары һәм уларҙы әҙерләү рецебы хәҙерге йәмғиәт тарафынан онотолоп бара.

**Проектың маҡсаты:** балаларҙы башҡорттарҙың милли аш-һыуы менән таныштырыу, милли ризыҡтарҙы тергеҙергә кәрәклегенә төшөнөү.

Бурыстар: башҡорт милли аштарының үҫеш юлын өйрәнеү; милли ризыҡтарҙы әҙерләү рецептары менән танышыу; башҡорт аштарының файҙалымы-юҡмы икәнен асыҡлау.

**Тикшеренеү объекты:** башҡорт милли аштары.

**Тикшеренеү предметы:** кешеләрҙең башҡорт аш-һыуына мөнәсәбәте, уның төрлөлөгө һәм туҡлыҡлылығы.

**Тикшеренеү гипотезаһы:** әгәр беҙ милли ризыҡтарыбыҙ тураһында күберәк белһәк, беҙ ҙә үҙебеҙҙең аш-һыу менән ғорурланырға мөмкин икәнен аңлаясаҡбыҙ, уларҙы әҙерләргә теләк барлыҡҡа киләсәк.

**Тикшеренеү методтары:** теоретик, мәғлүмәт туплау, һорау, дөйөмләштерееү, анализлау.

**Көтөлгән һөҙөмтәләр:** балалар милли ризыҡ менән ҡыҙыҡһына, теманы өйрәнгәндә үҙҙәре инициатива күрһәтә, һорауҙар бирә, әңгәмәлә актив ҡатнаша; ата-әсәләр ҙә эшкә теләп ҡушыла, балалар менән берлектә төрлө эштәр башҡаралар.

**Ата-әсәләр менән эш**

Әсәйҙәрҙәрҙең өйҙә ниндәй ризыҡтар әҙерләүҙәре, милли аш-һыуға ҡараштары, уны әҙерләү/әҙерләмәүҙәре тураһында һөйләшеү.

Әсәйҙәрҙең өйҙә балалар менән берлектә папье-машенан тәрилкәләр эшләүе.

Әсәйҙәрҙең өйҙә әсе ҡамырҙан балалары менән үҙҙәре теләгән милли аҙыҡты әүәләүҙәре.

# Папье-маше техникаһында эшләнгән орнаментлы тәрилкәләр



# Бишбармаҡ



# Ҡаҙы һәм тултырма





# Җур бәлеш



# Балалар менән эш

Тәүге көндә балаларға түбәндәге һорауҙарҙы биреү.

- Башҡорттарҙың милли аш-һыуын атағыҙ.
- Нисек уйлайһың, башҡорт аштары файҙалымы?
- Башҡорт миили ризыҡтарынан нимәне йыш ашайһың?
- Милли аш-һыуҙан ҡайһыныһы һиңә нығыраҡ оҡшай?

Һорауҙарға яуап алғандан һуң шундай һығымтаға килдем: бөтә балалар ҙа башҡорттарҙың киң таралған милли аш-һыуы менән таныш (бишбармаҡ, ҡорот, ҡаҙы, ҡымыҙ, сәксәк, бал), уларҙың файҙаһы тураһында әсәләре һөйләгәне бар. Өйҙә милли аш-һыуҙы әҙерләйҙәр, балалар яратып ашайҙар.

## Балаларға милли аш-һыу, уларҙы нисек әҙерләү тураһында мәғлүмәт биреү

Күсмә тормош рәүеше оҙаҡ һаҡларға яраҡлы аҙыҡтарҙың киң рәтен формалаштырыуға килтергән. Башҡорт милли аштарының төп массаһын бешерелгән, киптерелгән һәм ҡаҡланған йылҡы ите, ҡуй ите, һөт продукттары, киптерелгән еләк, киптерелгән бөртөклөләр, башҡорт балы тәшкил иткән. Был ашамлыҡтарҙың миҫалы булып ҡаҙы-ҡарта ҡаҙы (йылҡы колбасаһы), баҫтырма (ҡаҡланған ит - вяленое мясо) ла, шулай уҡ ҡаҡ, ҡымыҙ, сейәле һары май (вишня в топленом масле), муйыл майы (черемуховое масло), ҡорот (ҡоро ҡорот), эремсек һәм айран тора — был ашамлыҡтарҙың бөтөнөһө лә йәйге эҫелә лә сағыштырмаса яҡшы һаҡлана һәм уларҙы юлға алыуы уңайлы. Ҡымыҙ тап юлда әҙерләнә тип иҫәпләнә – бейә һөтө һалынған һауыт эйәргә бәйләнгән һәм һабала көнө буйына сайҡалып йөрөтөлгән.

Башҡорт ат колбасаһын «ҡаҙы-карта ҡаҙыһын» һәм ат майын яратыуы айырым иғтибарға лайыҡ: башҡорттар ат итен, ҡалын май киҫәктәре һәм, майлы аш тәьҫирен нейтралләштергән әсе ҡорот (әсетелгән һөт продукты) һалынған һурпа ҡушып, ашарға ярата.

Башҡорттарҙың ашамлыҡтары классик тәмләткестәрҙе аҙ һанда ҡулланыу менән айырыла: тик ҡара һәм ҡыҙыл борос ҡулланыла. Башҡорт ашамлыҡтарының үҙенсәлеге булып эҫе ашамлыҡтарҙа ла, закускаларҙа ла итте күп файҙаланыу тора.

# Ҡымыҙ

Ҡымыҙ башҡорттарҙың милли эсемлеге булып тора. Тәмле ҡымыҙ эшләй белеү элек-электән юғары баһаланған һәм был оҫталыҡ быуындан быуынға тапшырылған. Ҡымыҙ эшләү өсөн йылҡының үҙенсәлекле тоҡомдарына айырым иғтибар бирелә.



# Башҡорт балы

Башҡорт балы үҙенең тәм сифаты менән билдәле һәм башҡорттар уның менән хаҡлы ғорурлана. Бер сәй табынын да башҡорт балынан башҡа күҙ алдына килтереп булмай, ә яңы ағыҙылған ауыл ҡаймағы һәм бал яғылған икмәк – башҡорт милли аш-һыуы өлгөләренең береһе.



# Бишбармаҡ

Традицион башҡорт ашамлығы бишбармаҡ бешерелгән иттән һәм һалманан (эре итеп киҫелгән туҡмастың төрө) әҙерләнә, мул итеп һуған, йәшел тәмләткестәр ҡушыла һәм, әлбиттә, ҡорот өҫтәлә.



Артабан беҙ балалар менән башҡорт милли ризыҡтарынан «өҫтәл әҙерләнек», йәғни ризыҡ төшөрөлгән һүрәттәрҙе ҡырҡып, ҡағыҙ битенә йәбештерҙек.







Киләһе этапта әсе ҡамырҙан милли ризыҡтарҙы әүәләнек.







# Сәксәк, ваҡ бәлеш, өсмөйөш





# Ҡорот һәм ҡыҙыл эремсек






BASKETBALL